МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

Ата-әсәләр өсөн консультация

# *Телмәр үҫтереүҙә башҡорт халыҡ ижадын ҡулланыу*



# Телмәр үҫтереүҙә

# башҡорт халыҡ ижадын ҡулланыу

Балалар өсөн халыҡ ижады үрнәктәре – ауыҙ – тел сәнғәтенең ҙур бер өлөшө. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең тәрбиәүи әһәмиәте айырыуса ҙур.

Әсә телендә тәрбиәләнгән бала ғына, үҙ халҡының әхлаҡ ҡанундарын ҡабул итеп, милләтенә, уның теленә һәм ғөрөф – ғәҙәттәренә ысын мәғәнәһендә ихтирамлы була ала. Беҙҙең балалар баҡсаһында өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булып телмәр үҫтереү тора.

«Балаларҙың телмәр һәләтлелеген үҫтереү» темаһына Башҡортостан мәғарифте үҫтереү институтының доценты, педагогия фәндәре кандидаты Нафиҡова Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы етәкселегендә республика тәжрибә майҙансығы эшләне. Ошо майҙансыҡтың эш һөҙөмтәләре булып, беҙҙең коллектив уңышлы тип һанаған методик алымдарҙы, эш тәжрибәһен дөйөмләштереп, башҡорт балалар баҡсаһында эшләүсе логопедтар, тәрбиәселәр, ата – әсәләр өсөн методик ҡулланмалар сығарҙы.

Тәүге методик ҡулланма «Бәпембә» тип атала. Был ҡулланмала ике – өс йәшлек балаларҙың телмәрен үҫтереүгә бағышланған эшмәкәрлек өлгөләре бирелә. Ҡулланмала башҡорт халҡының ауыҙ – тел ижады менән таныштырыу аша баланың аҡыл – зиһенен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүсе методика асыла.

Ғаиләлә, балалар баҡсаһында баланың бармаҡтарының хәрәкәтсәнлеген үҫтереүгә айырыуса иғтибар итергә кәрәк, бармаҡтарҙы аҡыллы эшкә йүнәлтеү беҙҙән тора. Был бармаҡ уйынын дөрөҫ тын алыу һәм сығарыу өсөн эшләтеү отошло.

Уйындарҙы башлар алдынан балаға уйындың ҡағиҙәһен төшөндөрөү мотлаҡ. Бәләкәстәр менән ошондай бармаҡ уйындарын ҡулланабыҙ:

1. Баш бармаҡ башҡа сыҡҡан,

Имән бармаҡ ир булған,

Сығанаҡ бармаҡ сығып ҡасҡан,

Һуҡ бармаҡ өҙә һуҡҡан,

Сәтәкәй бармаҡ сәпәкәй иткән.

2. Бутыр – бутыр бутҡа бешкән,

Эсенә ҡалаҡ төшкән.

Ҡалаҡты алайым тигәнсе

Биш бармағы бешкән.

(*Бармаҡтар бешмәһен өсөн, һәр бармаҡҡа өрөп сығабыҙ*).

Һәр эшмәкәрлектә бармаҡ уйындарын уйнатыу баланың тел үҫешенә ыңғай һөҙөмтә бирә.

Киләһе методик ҡулланма «Аң – белем үҫтереүсе дидактик уйынсыҡтар» тип атала. Был методик ҡулланмала 1 – 3 йәшлек балаларҙы тирә – йүн менән таныштырыу, уларҙың фекерләү ҡеүәһен һәм телмәрен үҫтереү эшен ойошторғанда дидактик уйынсыҡтарҙы ҡулланыу методикаһы бирелә.

Эшмәкәрлектә кескәйҙәр төрлө төҫтәге һәм формалағы предметтар менән эш итергә төшөнә. Мәҫәлән, предметтарҙы ҡушыу, айырыу, бер – береһенә кейҙереп, кире сығарыу, ҡатлап теҙеү һәм башҡалар.

Балалар төрлө ҙурлыҡтағы уртаһында тишеге булған геометрик пирамидаларҙы (шар, куб) йыйырға, «ҙур», «бәләкәйерәк», «бәләкәй» төшөнсәләрен аңлы рәүештә ҡулланып эш итергә, өлгө буйынса кубиктарҙы күсәргә теҙергә өйрәнәләр.

Ике – өс йәшлек балаларҙың ололар күрһәтеүе һәм төшөндөрөүе аша уйын барышында дидактик ҡурсаҡ менән үҙ аллы уйнай белеүҙең тәүге күнекмәләре бирелә: нисек итеп ҡурсаҡты ашатырға, йоҡларға һалырға, йыуындырырға, кейендерергә һәм башҡалар. Уйын барышында ауыҙ – тел ижады өлгөләре ҡулланып эш итәм, сөнки хәрәкәттәр башҡарыу аша бала яңы һүҙҙәр менән таныша, уларҙың әйтелешен, аңлатҡан мәғәнәһен хәтерендә ҡалдыра. Мәҫәлән, «ҡурсаҡ уянды» тигән эшмәкәрлектә ошондай әүрәткестәрҙе әйтергә мөмкин.

Тор, балам, тор инде,
Уяныр ваҡыт етте,
Тор, балам, тор инде,
Ҡояш күптән ҙур инде,
Тор, балам, тор инде,
Ҡояш менән бергә тор,
Ялҡау булма, уңған бул,
Тор, балам, тор инде.

Киләһе методик ҡулланма «Фонематика» тип атала. Был ҡулланма кескәйҙәр өндө ишетһен, айырһын, дөрөҫ әйтһен өсөн артикуляция, дөрөҫ тын алыу һәм сығарыу күнегеүҙәре бирелә«Матур һөйләшәм» тигән методик ҡулланма телмәрендә өн кәмселектәре булған балалар менән өндәрҙе дөрөҫ әйтергә телмәр ағзаларын әҙерләү, өндәрҙе ҡуйыу, автоматлаштырыу һәм айырырға өйрәтеү өсөн бөгөнгө көндә әүҙем ҡулланылған методик алымдар бирелә. Өндәрҙе дөрөҫ ишетеүгә һәм айырыуға төрлө күнекмәләр,

тиҙәйткестәр һәм тел төҙәткестәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр бирҙек.Мәҡәл һәм әйтемдәрҙе мәктәпкә әҙерлек төркөмө балаларының һөйләм телмәрен камиллаштырыуҙа ҡулланыу ыңғай һөҙөмтә бирә.

Халыҡ ижады әҫәрҙәренән балаларға иң яҡыны һәм яратҡаны – экиәттәр.Халыҡ экиәттәре – һөйләү телен үҫтереүҙә бай материал булып иҫәпләнә. Хәрәкәттәрҙең, герой һүҙҙәренең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүе балаларҙы әҫәрҙәр менән танышыу процессын йәнле һәм ҡыҙыҡлы итеп алып барырға ярҙам итә. Мәҫәлән, «Тарталар, тарталар тартып сығара алмайҙар», «Баралар, баралар, ниһәйәт, барып етәләр» һәм башҡа ҡабатлауҙар балаларҙың телен шымарта, экиәттең өҙөктәрен һөйләргә теләү теләге уята.

Шулай уҡ телмәр үҫтереүҙә тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр ятлауҙың роле ҙур.

Ҫа – ҫа – ҫа – ҡайһылай матур баҫа,

Са – са – са – тыпырлап күңел аса,

Са – са – са – дәртләндерәм: «их, ас – са!»

Са – са – са – бейей шулай башҡортса.

Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү, автоматлаштырыуҙа балаларға шиғыр ятлатыу эше айырым урын алып тора.

Хәрәкәт менән шиғыр ятлағанда бала арымай, һаулығы өсөн дә әһәмиәтле, ул бөтөн кәүҙәһе менән хәрәкәтләнә. Баланың ваҡ һәм дөйөм моторикаһы үҫә. Шиғри ритм менән эшләү балаға шиғырҙы тиҙ иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Мин килдем, килдем, килдем,

Һәм ҡыҙыл еләк таптым,

Их, тәмле еләк тиеп

Ауыҙға алып ҡаптым.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа күрмә – образлы хәтер күберәк урын алып тора. Әгәр ҙә шиғырҙы һүрәтһеҙ шул көйө ятлаһаң, балалар ул шиғырҙы тиҙ арала онотала. Ә балаларҙың хәтерендә иҫ киткес бер үҙенсәлек бар-улар

күҙ менән күреп һүрәтте бик тиҙ арала “фотоға” төшөрөп алалар. Ятлаған шиғырҙы иң тәүҙә һүрәткә ҡарап бер нисә тапҡыр һөйләйһең, шунан һуң балалар үҙҙәре ҡабатлайҙар. Һүрәткә ҡарап, балалар бик тиҙ һөйләргә өйрәнәләр.Мәҫәлән: “Мышы”, “Туп” шиғырҙары:

**Мышы**.

Ҡарағыҙ: мышы килгән,
Бесән ваҡытын белгән.
Ә башына берәү түгел,
Ике тырмаһын элгән.

**Туп**.

Ғәтиә илай ҡысҡырып,
Тубы төшкөн йылғыға,
«Ҡуйсы, Ғәтиә илама,
Туп батмай ул йылғала.

Иртәгәһенә бала шиғырҙы онотһа, һүрәтте күрһәтеү менән ул уны иҫенә төшөрөп, бик тиҙ генә һөйләп бирәсәк.Был ысул хәтере, телмәре үҫешмәгән балалар өсөн дә бик үҙенсәлекле, ыңғай ысул булып тора.

Шулай уҡ, тел төҙәткестәр, шиғырҙар ятлағанда, бәләкәй хикәйәләр төҙөгәндә мнемотаблицалар (мнемосхемалар) ҡулланам. Бындай таблицалар хәтерҙә ҡалдырыуҙы еңеләйтә.

Шулай итеп, “Халыҡ тыуҙырған һәм халыҡ башланғысына нигеҙләнгән тәрбиә-иң һәйбәте. Уға тиңе юҡ”.

Һеҙҙең иғтибарығыҙға өлкәндәр төркөмөндә “Бал ҡортона ҡунаҡҡа” темаһына эшмәкәрлектән өҙөк тәкдим итәм.